# Лайыҡлы лауреаттар

Шәйехзада Бабич исемендәге республика йәштәр премияһы лауреаттары һаны тағы ла өс кешегә артты. Абруйлы премияға лайыҡ булыусылар сафына архитектор Илдар Ибраһимов, йырсы Хәсән Усманов һәм музыкант Әминә Шафиҡова өҫтәлде. Йәш булыуҙарына ҡарамаҫтан, улар республика мәнфәғәте өсөн байтаҡ эштәр атҡарып өлгөргән шәхестәр. Мәҫәлән, Илдар Ибраһимов Ш.Бабич исемендәге премияның миҙал макетын һәм Башҡорт дәүләт университеты бинаһында Интернет-терминалды эшләүҙә ҡатнашҡан һәм үҙен һәләтле, өмөтлө архитектор итеп танытып өлгөргән. Әле ул "Башкиргражданпроект" институтында архитектура оҫтаханаһы етәксеһе вазифаһын үтәй. Илдарҙың хеҙмәт емештәрен баш ҡалабыҙ Өфөлә, республикабыҙҙың башҡа ҡалалары һәм райондарында сафҡа баҫҡан торлаҡ йорттар һәм социаль-мәҙәни биналар өлгөһөндә күрергә мөмкин.

Әбйәлил егете, үҙенсәлекле һәм моңло тауышы менән йыр тыңлаусылар күңелендә урын алған йырсы Хәсән Усмановты Башҡортостанда ғына түгел, күрше төбәктәрҙә лә яҡшы беләләр. Халыҡ-ара, республика бәйгеләре лауреаты булған йәш йырсы әле Башҡорт дәүләт филармонияһында эҙҙем эшләй. Уның 14 аудио- һәм видео-, CD альбомдары донъя күргән.

Бөрйән ҡыҙы, Башҡортостандың музыка сәнғәтенең сағыу вәкиле Әминә Шафиҡованың исеме лә киң билдәле. Дәүләт хеҙмәте органдарында эшләү менән бергә, Әминә педагог эшен дә, ижадын да уңышлы атҡара. Әле студент йылдарында уҡ уның ижади уңыштары БР Президенты, РФ Мәҙәниәт министрлығы, "Яңы исемдәр" республика, халыҡ-ара мәрхәмәтлек программалары стипендиялары менән билдәләнеүе күп нәмә хаҡында һөйләй. Артабан иһә Әминә Шафиҡова Нариман Сабитов исемендәге I Республика бәйгеһенең тәүге лауреаты булды, Францияла, Болгарияла, Италияла уҙған халыҡ-ара конкурстарҙа еңеүҙәр яуланы һәм республикабыҙҙы донъя кимәлендә танытты. Хеҙмәтенә күрә хөрмәте тигәндәй, 2002 йылда уға "Башҡортостандың атҡаҙанған артисы" тигән маҡтаулы исем бирелде.

— Һәр милләттең уның бөҫөн күтәргән, уға дан өҫтәгән шәхестәре була. Милли батырыбыҙ Салауат Юлаев менән бер рәттән Шәйехзада Бабич та үҙенең әҫәрҙәрендә тыуған яғын, йәшлекте, матурлыҡты данлаған. Беҙҙең йәштәребеҙ ҙә көндән-көн үҙҙәре хаҡында нығыраҡ белгертә, уңыштары менән ҡыуандыра. Йәшәйешебеҙҙе шулай йәмләүҙә һәм матурлауҙа һәр кем үҙенең дә хеҙмәт өлөшө булыуын тойһон ине. Был бик мөһим, — тине Башҡортостан Хөкүмәтенең Премьер-министры Рафаэль Ибраһим улы Байдәүләтов лауреаттарға премияларҙы тапшырғанда.

Бабич премияһына лайыҡ булыу — үҙ халҡыңдын лайыҡлы улы һәм ҡыҙы булыу тигән һүҙ ул. Яңы лауреаттар киләсәктә лә үҙ халҡына, гүзәл Башҡортостаныбыҙға ихлас хеҙмәт итер, илебеҙ данын, рухиәтен күтәрер, ошо юғары бүләккә өр-яңы уңыштар өҫтәр, табыштар менән ҡыуандырыр тип ышанғы килә.

*Белешмә өсөн: әҙәбиәт, сәнғәт һәм мәҙәниәт өлкәһендәге Шәйехзада Бабич исемендәге республика йәштәр премияһы 1995 йылда булдырылған. 11 йыл эсендә уға 45 кеше лайыҡ булған.*



*Лауреаттарға премия тапшырыу мәле. 2006 йыл*

**Бына улар, Шәйехзада Бабич премияһы лауреаттары**

1995 йыл
Журналист Фәрзәнә Аҡбулатова
Опера йырсыһы Зөһрә Байбурина
Шағир Рәйес Түләков

1996 йыл
Рәссам Ләйсән Рәхмәтуллина
"Башҡортостан" киностудияһының ижади коллективы (сценарий авторы Айҙар Аҡманов, рәссам Владислав Байрамғолов, оператор Рияз Исхаҡов, режиссер Булат Йосопов)

1997 йыл
Рәссам Ринат Миңлебаев
Шағирә Тәнзилә Дәүләтбирҙина
Рәссам Әмир Мәжитов
Рәссам Йәлил Сөләймәнов
Милли йәштәр театрының ижади коллективы (актерҙар Азат Йыһаншин, Рәсүл Ҡарабулатов, Фирҙәт Ғәлиев, Рушана Бабич)

1998 йыл
Телевидение режиссеры Гөлназ Ҡолһарина
Йырсы Вәхит Хызыров
"Аманат" музыка студияһының ижади коллективы (Алмас һәм Илдар Ғафаровтар, Рәмил Иҡсанов, Юлдаш Ураҡсин, Руслан Ниғмәтов)

1999 йыл
Балетмейстер Рәйес Низаметдинов
Балерина Гүзәл Сөләймәнова
Композитор Юлай Үҙәнбаев
Эстрада йырсыһы Земфира Рамазанова

2000 йыл
Рәссам Сулпан Билалова
Композитор Урал Иҙелбаев
Актер Азамат Хәлилов

2001 йыл
Архитектор Искәндәр Бикташев
Йырсы Гөлдәр Ишҡыуатова
Виолончелист Антон Павловский

2002 йыл
Актер Алмас Әмиров
Актер Тимур Ғарипов
Яҙыусы-тәржемәсе Ғәйнислам Ибраһимов

2003 йыл
Ҡубыҙсы Миндеғәфүр Зәйнетдинов
Шағирә Зөлфиә Ханнанова
Ҡурайсы Роберт Юлдашев

2004 йыл
Театр режиссеры Мөсәлим Күлбаев
Пианист Рөстәм Шәйхетдинов
Публицист Сәлмән Ярмуллин

2005 йыл
Пианистка Әминә Шафиҡова
Архитектор Илдар Ибраһимов
Йырсы Хәсән Усманов.

*Зөһрә АЛТЫНБАЕВА.*